# Уҡыусыларҙың телмә-рен байытыуҙа алғыш-тарҙы ҡулланыу

**Баҡалы районы Яңы Илек төп дөйөм белем биреү мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Кузнецова Галина Виктор ҡыҙы.**








**Һүҙ аша баланы халыҡтың рухи донъяһына,тормошона алып инергә кәрәк.**



**К.Д.Ушинский**

***Уҡытыу-тәрбиә эшендә йүнәлештәр :***

-балаларҙың һөйләү телмәрен һәм ижади фекерләүен үҫтереү;

-ғөрөф-ғәҙәттәрҙе ,йолаларҙы тергеҙеү һәм үҫтереү нигеҙендә халҡыбыҙҙың тарихын өйрәнеү:

-милли рухлы шәхес тәрбиәләү;

-яҡташ яҙыусыларҙың әҫәрҙәрен өйрәнеү аша тыуған яҡка һөйөү һәм арҙаҡлы шәхестәр менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү.

**<u>Алғыш</u>** –һәйбәт кешегә теләк,маҡтау,дан рәүешендә ижад ителгән шиғри жанр. Ғәрәп теленән үҙләштерелгән һүҙ *<u>фатиха</u>* тигәнде аңлата.

Был һүҙ татарҙарҙа **алҡыш**, ҡараҡалпаҡта,сахала-**алғыс**, ҡарасәйҙә **алғышла** тип йөрөтөлә

Бойороҡ һөйкәлеше формалары йәки нигеҙ ҡылымға иҫкелек ҡалдығы булып һаҡланып ҡалған *–ҡыры/-кере, -ғыры / -гере* ялғауҙары эйәреү юлы менән яһала






**Балыҡсыға,аусыға.**

Тәңре  һиңә дарман бирһен,
Тау эйәһе фарман бирһен!

# Ҡортсоға:



Солоғоң ҡотло булһын!
Күс артынан күс ҡунһын!



# *Малсыға:*



Көткән малың-түккән тирең хәләл мәнфәғәтеңә яҙһын!



***Эш башлап тороусыға:*** Алла ярҙам ҡылһын! Эшең уң булһын!-тиҙәр.



- ***Берәй эште беренсе булып башлаусыға:*** **“Ҡул  артың еңел булһын!”, “Аяғың еңел булһын!”** – тип теләйҙәр.

# Яңы кейем кейеүсегә :

Кейемең ҡотло булһын,
Йылы тәнеңдә туҙһын.



- “Амин”,
- “Шулай булһын”,
- “Бергә булһын”,
- “Алланың амин тигән сағына тура килһен”

***Дәрүиш:***

“Йорт-ерең,мал –тыуарың именлектә,

күңел-хәтерҙәрең бөтөнлөктә булһын,

байбисә.Баш осоңдан ырыҫ ҡошо китмә-
hен”

***Тәңкәбикә:***

“ Рәхмәт ,мосафир,амин шулай булһын.

Һинең дә күңелең таплы,күҙең яман бул-

маһын.Төклө аяғың менән рәхим ит.Әйҙә”

***(М.Кәрим)***



Өлкәндәргә ҡайҙа ла
Хөрмәт күрһәт киленсәк.
Кеселәргә ҡайҙа ла
Үрнәк күрһәт , киленсәк.



Балам,балам бал ғына,
Үҫер әле яй ғына.
Ризыҡтары менән тыуҙы,
Ашаһын гел май ғына.

**Нәфис әҙәбиәттә бындай изге теләктәргә матур өлгөләр байтаҡ:**

-Изге ихтыярың менән сабыйҙар тағы, тағы,
тағы донъяға яралһын,һиңә иман килтереп гонаһһыҙ йәндәр тыуһын! (М.Кәрим).
-Улығыҙ менән ҡотлайым һеҙҙе!Үҙегеҙгә иптәш,ҡартайған көнөгөҙҙә терәк булһын, егет ҡорона тулып,фамилияғыҙҙы данлаһын,нәҫелегеҙҙе ҙурлаһын!
(Т.Ғарипова).



# Сәңгелдәк йыры:

*Һандуғасым,аҫыл ҡошом,*
*Йокла,бәғерем.*
*Йоҡла,иркәм,йоҡла,бәпкәм,*
*Бәүкәй бәлли бәү.*

-Иҫән һау йөрөп ҡайт,
-бәхетле бул,
-оҙон ғүмерле бул,
-оҙаҡ ҡыуаныста булһын,
-бергә-бергә йәшәргә яҙ-
һын,
-алла бәрәкәт бирһен.

Изге теләк модаллеге ҡылымһыҙ һөйләм төрҙәрендә ҡулланыла. Миҫалдар:

*Тыныс йоҡо!*

*Байрам менән!*

*Хәйерле юл!*

*Хәйерле сәғәттә!*

*Ҡотло аяғың менән!*

## *Ҡулланылған әҙәбиәт:*

1.Башҡорт халыҡ ижады:Йола фольклоры. 1-се том.-Өфө:Китап,1995.
2.Балалар фольклоры:бала саҡ-уйнап-көлөп үҫер саҡ.-Өфө:Китап,1994.
3.Дмитриев Н.К. Башҡорт теленең грамматикаһы.Ғилми баҫма.-Өфө,2008.
4.Хөсәйенов Б.Ғ.Әҙәбиәт ғилеме һүҙлеге.-Өфө:Китап,2006.